

*Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА*

# Әсәм, балам...

Ғүмеремдең ике яры —
Ике тотам ғына арам —
Әсәм, балам.
Береһенә яҡынаям,
Береһенән алыҫаям —
Әсәм, балам.

Ғүмеремдең ике осо —
Фәрештәләй ике ҡошо —
Әсәм, балам.
Берәүһе күктәргә осто,
Берәүһе муйындан ҡыҫты —
Әсәм, балам.
Берәүһенән яралғанмын,
Береһенә йән өргәнмен —
Әсәм, балам.
Береһендә ышыҡ табам,
Береһенә усаҡ яғам —
Әсәм, балам.



10-2001.p65 175 02.11.01, 15:31

Берәүһен утҡа һалғанмын,
Берәүһен уттан аламын —
Әсәм, балам.
Берәүһен гел һағынамын,
Берәүһенә табынамын—
Әсәм, балам.

## НИНДӘЙ БУЛЫР ИНЕҢ ИКӘН?

Урамдағы анау инәйҙәргә
Ҡарайым да, әсәй, һиҫкәнәм.
Ниндәй булыр инең икән, тием,
Улар йәштәренә һин етһәң?
Һинең йәшкә бер мәл етер өсөн
Мин ҡыҫҡартам ғүмер араһын.
Ә унан һуң... мин ҡартайған
һайын,
...Һин йәшәрә генә барырһың.

## ӘЛЛӘ НИСЕК БӨГӨН ТӨШКӘ ИНДЕҢ

Ниндәй үпкәң ҡалды беҙгә, әсәй?
Әллә нисек бөгөн төшкә индең.
Һүҙһеҙ генә миңә ҡарап торҙоң,
Әйтсе серен күҙеңдәге моңдоң?

Бер һыйынғым килде ҡосағыңа,
Бала саҡтағылай йүгереп килеп.
Ҡыҫып-ҡыҫып,
тупылдатып һөйөп,
Йылмайырһың кеүек,
балҡып-көлөп.

Бер туйғансы һөйләшергә, әсәй,
Зар-интизар булып ултырҙың бит.
Һағышыңды беҙгә һиҙҙермәйсә,
Йөрәгеңә генә тултырҙың бит.

Хәҙер үҙем һинең менән, әсәй,
Һөйләшергә зар-интизар булдым.
Был донъяла әсәйҙәрҙең генә
Беҙҙе аңлағанын һуңлап белдем.

Ниндәй генә үпкәң ҡалды икән?
Әллә нисек бөгөн төшкә керҙең..
Донъяныҡы донъялыҡта ҡалһын,
Тиеп миңә әллә һабаҡ бирҙең.

## БЕЙЕЙ ҠОЯШ, ЙОНДОҘ, ТУЛҒАН АЙ...

Рәхмәт, балам, мин бит
һинең менән
Өр-яңы бер ғүмер кисерәм.
Был донъяға тыуғаныңдан алып,
Йәшәү бәхетенән иҫерәм.

Һиндә ҡайтам, улым, мин үҙемдең
Хәтерҙәге бала сағыма.
Ҡарашыңда, көлөү, һөйләшеңдә
Минең холоҡ, ҡылыҡ сағыла.

Ҡайҙан белер инем,
һин тыумаһаң,
Һинең кеүек булған мәлемде?
Хәҙер миндә — ике бала ғүмере,
Ике сабый һаҡлай йәнемде.

Һинең менән өр-яңынан асам
Был донъяның барлыҡ серҙәрен.
Йылмайыуың һыпырып ала кеүек
Маңлайҙағы тәрән һырҙарым.

Һин тыуғанға тиклем
минең тормош
Ҡаралама ғына булғандай.
Аҡҡа яҙған ғүмер биттәремдә
Бейей ҡояш, йондоҙ, тулған ай.



## ҺУҢҒЫ хат

Афған, чечен һуғышында
һәләк булған егеттәрҙең
әсәйҙәренә һуңғы һүҙе

Илама, әсәй, илама,
Зинһар, үҙеңде һаҡла.
Мин һеҙҙең менән йәшәрмен,
Һеҙ иҫән булған саҡта.
Ҡулдарым йылыһын һаҡлай
Мине оҙатҡан ҡапҡа.
Ҡапҡа төптәренә сығып,
Ҡарама киткән яҡҡа.
Йылы ел булып һыйпармын
Һиңә бик ҡыйын саҡта.
Бергә үткән ғүмерҙәрҙе
Хәтер ҡуҙында яҡма.
Минең һуңғы һүрәтемде
Иҫтәлек итеп һаҡла.
Төштәреңдә йыш ҡайтырмын
Күрәһең килгән саҡта.
Һағышланып күккә баҡма,
Йондоҙ атылған саҡта.
Ул минең йәнем юлланыр
Тыуған ер, тыуған яҡҡа.
Илама, әсәй, илама,
Зинһар үҙеңде һаҡла.
Мин һеҙҙең менән йәшәрмен,
Һеҙ иҫән булған саҡта.



10-2001.p65 176 02.11.01, 15:31